## Шиғри тулҡында

Риф МИФТАХОВ

### ИЗГЕЛЕК

*Һыуҙа - балыҡ, күктә - ҡош-ҡорт*
*Эҙҙәрен ҡалдырмайҙар.*
*Ерҙә лә изге йәнлеләр*
*Эҙ, һүҙ өсөн ҡылмайҙар.*

*Ҡылғандары - саф күңелдән,*
*Булғас йөрәк түренән.*
*Ҡылған йәнгә, сауап булып,*
*Ҡайта бит ул киренән.*

*Хоҙай күҙе - Йыһан күҙе:*
*Күрә, ҡыла барын да.*
*Изге булыу - ул бөйөклөк*
*Выждан - Хоҙай алдында.*

Тамара ЮЛДАШЕВА

### РУХ КӨМБӘҘЕ

*Йыһан икән ҡалҡаны,*
*Меңәр йондоҙ ҡалҡҡаны:*
*Оло йөрәк - ысын ирҙең*
*Күкрәгендә ҡаҡҡаны.*

*Илем, тиеп ҡалҡыр ул,*
*Илем, тиеп balҡыр ул.*
*Йөрәгенең түрҙәрендә*
*Йөрөтөр гел халҡын ул.*

*Тыуған төйәк - гөлөбөҙ,*
*Рух көмбәҙе - телебеҙ.*
*Хоҙай биргән бер ҡомартҡы,*
*Саф хазина - илебеҙ!*

## Быны белергә кәрәк

# УРАҘАҒА ӘҘЕРҺЕГЕҘМЕ?

Әғләметдин хәҙрәт ҒӘЗИЗОВ,
Сибай ҡалаһының "Тәҡүә" мәсете имамы

Мөхтәрәм мосолмандар!

Ураҙа тоторға теләгәндәр нимә белергә тейеш? Рамаҙан айының беренсе кисендә йәсту намаҙынан һуң беренсе тәрәүих намаҙы уҡыла.

Тәрәүих намаҙын мәсеттәргә йыйылып йәмәғәт менән уҡыу бик оло сауаплы сөннәт ғәмәлдер. Тәрәүих намаҙын 20 йәки 8 рәкәғәт уҡыу ихтыярлы. Ләкин 20 рәкәғәт сауаплыраҡтыр.

Ниәт һәм ифтар доғаһы.

Ураҙа тотоусы кеше ҡояш ҡалҡырҙан ике сәғәт алда сәхәр эсеп (ашап) бөтөргә тейеш. Шунан һуң ураҙа тотоуына ниәт итә.

Мөмкин ғәрәпсә: "Нәүәйтү ән әсуумә саумә шәһри рамаҙаанә минәл фәжери илəл мәғри-бе хаалисал лилләәһи тәғәләә".

Мөмкин үҙебеҙсә: "Илләһи ниәт ҡылдым, бер Аллаһы Тәғәлә, үҙеңдең ризалығың өсөн рамаҙан ураҙаһын тотмаҡҡа, таң беленгәндән алып ҡояш байығанға ҡәҙәр", - тип әйтһәк, ниәт була.

Ҡояш байығас, ауыҙ асырға (ифтар ҡылырға) тейеш булабыҙ. Ауыҙҙы тоҙ һәм һыу менән асыу яҡшыраҡ һанала. Татлы емеш, бигерәк тә хөрмә менән асыу һәйбәт. Ауыҙ асҡас: "Аллаһуммә ләкә сумтү үә бикә әмәнтү үә ғәләйкә тәүәккәлтү фәғфирлии йәә ғәффәру мә ҡаддәмтү үә мәә әххартү", - тип доға ҡылабыҙ.

Үҙ телебеҙҙә: "Эй Аллаһы, ошо ураҙамды мин һинең өсөн генә тотам, мин һиңә генә иман килтерҙем, үә һиңә тәүәккәл ҡылдым, үә һинең ризығың менән ауыҙымды асамын. Эй гонаһтарҙы ғәфү итеүсе Аллаһы, инде минең әүәлге һәм һуңғы гонаһтарымды ярлыҡағыл".

26 Рамаҙан - ҡояш байыу менән, Аллаһы Тәғәлә бойорһа, ҡәҙер кисе - Ләйләтүл-Ҡадр. Пәйғәмбәребеҙ бер көнө сәхәбәләргә мөрәжәғәт итеп: "Ҡәҙер кисен Рамаҙан шәриф айының ахырғы ун көнөнөң бер таҡ кисендә эҙләгеҙ", - тигән.

Ураҙа байрамы өс көн дауам итә.

Ураҙа тотоу - нәфсене еңеү

Ураҙа - Аллаһы Тәғәлә тарафынан мосолмандарға бирелгән оло рәхмәт һәм ниғмәттер.

Ураҙа беҙгә нәфсене еңергә, күңелде пакларға, хайуан сифаттарынан ҡотолорға, Аллаһы Тәғәлә менән яҡынайырға ярҙам итә, сәләмәтлегебеҙҙе нығыта. "Ураҙа ҙур һәм ауыр бер ғибәҙәттер, ләкин уны тотҡан кеше күп сауапҡа ирешер һәм эшләгән гонаһтары ғәфү ителер", - тип әйтелә икенсе бер хәҙистә.

Мөхәммәд пәйғәмбәр: "Һәр нәмәнең зәкәте бар, кәүҙәнең зәкәте - ураҙалыр" һәм "Ураҙа - сабырлыҡтың яртыһылыр", тигән. Шулай булғас, ураҙа тотоу кешене сабыр булырға өйрәтә, ул кеше нәфсенең ҡоло булмай. Ураҙа кешеләрҙә шәфҡәт, мәрхәмәт һәм мохтаждарға ярҙам итеү тойғоһон уята.

Шулай уҡ ураҙа һаулыҡҡа ла файҙалы. Һөйөклө пәйғәмбәребеҙ бынан 1400 йыл элек үк: "Ураҙа тотоғоҙ, һау булырһығыҙ", - тип бойорған. 11 ай туҡтамайынса эшләгән эске ағзаларыбыҙ был айҙа ял итә. Табиптарҙың әйтеүенсә, иң ауыр вазифаны башҡарыусы ағзаларҙың береһе бауыр. Рамаҙан айында, әгәр ураҙа тотһаҡ, һәр көн алты сәғәт был ағзабыҙ ял итә һәм кеше кәүҙәһендәге артыҡ зарарлы майҙар янып бөтә.

Һәр төрлө фарыз эштәрҙе үтәү кешене Аллаһы Тәғәләгә тоташтыра һәм яҡынайта торған рәхмәттер. Аллаһы Тәғәлә беҙгә һау-сәләмәт булып изге Рамаҙан айын ҡаршыларға насип иткән, уны ғафиллек, йәғни вайымһыҙлыҡ менән үҙ нәфсебеҙгә хужа була алмайынса үткәрә күрмәйек.

**ХӘҘИС ШӘРИФТӘР:**

*Ураҙа - йәһәннәм уты әҫелегенән ҡалҡандыр.*

*Сәхәр ваҡытында сәхәр ашын ашағыҙ, сөнки сәхәрҙә бәрәкәт бар.*

*Рамаҙан - тыйылыу айы, ураҙа тыйылырға өйрәтә торған ғибәҙәт.*

*Рамаҙан айын тулыһынса ураҙа тотоп, шәүүәл айында йәнә алты көн ураҙаны дауам итеүсе бер йыл нәфел ураҙа тотоусы сауабына ирешер.*

*Рамаҙан айы бик мөбәрәк бер айҙыр. Был айҙың башы - рәхмәт, уртаһы - мәғфирәт, ә аҙағы - йәһәннәм ғазабынан ҡотолоуҙыр.*

*Бәхетһеҙлек өс төрлө: яҡшылыҡ эшләһәң - рәхмәт әйтмәгән, насарлыҡ эшләһәң - ғәфү итмәгән имам (башлыҡ), изгелек күрһә, шуны ергә күмгән, яманлыҡ күрһә, шуны тирә-йүнгә сәскән күршең, бергә йәшәгәндә һине рәнйеткән, һиңә хыянат иткән яртың (ирең йә ҡатының).*

*Өс кешенең: атаһының балаһына ҡылған доғаһы, мосафирҙарҙың һәм рәнйетелгән кешеләрҙең доғаһы, һис шикһеҙ, ҡабул ителер.*

Ураҙа ғибәҙәте 624 йылда шәғбан айының 10-сы көнөндә фарыз ҡылынған. Пәйғәмбәребеҙ үҙенең хәҙисендә: "Рәжәб айы - Аллаһы Тәғәләнең айы, Шәғбан айы - минең, ай Рамаҙан айы - кешеләр өсөн Аллаһы Тәғәлә тарафынан бүләк итеп бирелгән ай", - тигән.

Рамаҙан айы - бер айҙарҙың солтанылыр, сөнки ошо айҙа кешелеккә ебәрелгән һуңғы пәйғәмбәр Мөхәммәд саллаллаһү ғәләйһи үә сәлләмгә пәйғәмбәрлек килә һәм изге Ҡөрьән-Кәрим төшөрөлә башлай.

Аллаһы Тәғәлә тотҡан ураҙабыҙҙы, уҡыған аяттарыбыҙҙы, биргән саҙаҡа һәм фитырҙарыбыҙҙы ҡабул ҡылып, үҙенең йәннәттәрендә осрашыуҙарыбыҙҙы насип итһә ине, Амин.

Илебеҙ тыныс, тормошобоҙ бөтөн булһын өсөн тырышып эшләүсе етәкселәребеҙгә Аллаһы Тәғәлә ярҙамдарын бирһә ине.

Рамаҙан айы шәрәфәте менән йөрәктәребеҙ иман нурында нурланһын, йорттарыбыҙ хәйер-бәрәкәт менән тулһын, үҙебеҙ рәхим-шәфҡәт эйәләренә әйләнәйек.

## Уйланырға саҡырам

Әҙеүәт ҒӨБӘЙҘУЛЛИН,
Имам-хәҙрәт,
Салауат районы, Ҡарағол ауылы

# ИСЛАМ, ИМАН, МОСОЛМАН

Аллаһы Тәғәлә хәҙрәттәренең сәләме һәм рәхмәте булһын күңелдәрегеҙгә! Хөрмәтле мосолмандар, дин - ул нәсихәт, иман - йәшәү рәүешебеҙ. Динле кеше иманлы булыр. Диндә өгөт бар, әммә көсләү, мәжбүрләү юҡ. Ул - яҡшыға өгөтләү (донъя көтөргә, өйләнергә, ағас ултыртырға, балалар тәрбиәләргә), Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡандарын үтәп, тыйғандарынан тыйылып, үҙең белгәнде башҡаларға ла өйрәтеп, үҙ юлыңдан - дин-иман юлынан барыу үрнәге. Иманлы булыу беҙгә ҡайҙан килә? Нисек иманлы балалар үҫтерергә?

Бала тәрбиәләү әсә ҡарынында уҡ башланырға тейеш, артабан - бишектә һәм өйҙә. Әгәр ҙә ата-әсә балаһын йортта иманлы итеп тәрбиәләһә, оло сауапҡа ирешер, ин ша Аллаһ. Әгәр ҙә беҙ үҙебеҙ эйәртеп, мәсеткә алып барһаҡ, имамдарҙың вәғәзен, Ҡөрьән-Кәримдән аяттарҙы бергә тыңлаһаҡ, йома намаҙҙарына йөрөтһәк, әкренләп намаҙға баҫтырһаҡ, бергә ураҙа тотһаҡ, балаларыбыҙҙың уҡыуҙан башҡа насарлыҡтар эшләп йөрөргә ваҡыты ла ҡалмаҫ, хөрмәтле мосолмандар.

Ололарҙы хөрмәт итергә, сәләм бирергә, үҙенән бәләкәстәрҙе йәберләмәҫкә өндәһәк - был иманлы булыуҙың үҙе үк бер сәбәбелер. Хәҙерге ваҡытта баштарына түбәтәй кейеп "мин мосолман", тип күкрәк һуғып йөрөүселәр күбәйеп китте түгелме? Кемдәр һуң улар? Мин, имам буларaҡ, һәр ваҡыт халыҡ араһында булам һәм һорап ҡуям: "мосолманмын, тиһең, ә ул кем була?" Күпселек аптырап ҡала, ҡай берәүҙәр: "башҡорт булһаң, шул еткән, сөнки башҡорт мосолман бит", тип тә яуап бирә.

Беҙҙе Ҡөрьән-Кәрим: "мосолман шул кеше булыр - Аллаһы Тәғәләне бар тип, бер тип белеүсе", тип өйрәтә, "һуңғы пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд мостафа саллаллаһу ғәләйһис сәләм", тип телебеҙ менән әйтеп, күңелебеҙ менән инанһаҡ-ышанһаҡ һәм дә телебеҙ менән дә, ҡулыбыҙ менән дә үҙебеҙгә лә, башҡаларға ла насарлыҡ ҡылмаһаҡ, мөъмин-мосолман булырбыҙ, ин ша Аллаһ! Алда мин телгә алғандар мосолманмы һуң? Бик икеле. Улар күп ваҡыт донъяларын ҡарамай, хәмер эсеп, балаларын тәрбиәләүҙән ситтә йөрөгән әҙәмдәр.

Аллаһы Тәғәлә: "Ер - ул мәсет, Мин ендәрҙе һәм әҙәмде ергә үҙемә намаҙ уҡыһындар өсөн генә төшөрҙөм", ти. Шуны онотмаһаҡ ине. Аллаһы Тәғәләнең ҡушҡандарын үтәп, ҡушылмағанынан тыйылып, һәм шуға башҡаларҙы ла өндәһәк, халыҡ алдында абруйлы кеше, ысын мосолман булырбыҙ. Хөкүмәтебеҙ ҙә дингә йөҙ менән боролдо, тиһәк булы. Гәзит-журнал уҡып, телевизор ҡарап, хәбәрҙарбыҙ: тегендә лә, бында ла мәсеттәр асылып тора, халыҡтар әкренләп үҙ асылына ҡайта башланы. Күп илдәрҙә милләт-ара ығы-зығы шул дин арҡаһында килеп сыға, илебеҙҙә сағыштырмаса тыныс, балаларыбыҙ мәктәпкә йөрөй, эшләгәндәр - ваҡытында хеҙмәт хаҡы, өлкәндәр пенсия ала. Шул уҡ ваҡытта арабыҙҙа халыҡтарҙы бутап, низағ ҡуптарырға уйлағандар ҙа юҡ түгел. Ундайҙар үҙҙәрен мосолман тип атай аламы? Юҡ. Аллаһы Тәғәлә: "Ерҙә үҙ-ара тыныс, һыйынып, дуҫ булып йәшәгеҙ", тип әйтә. "Барыһын да бирҙем - байлығын да, ашар ризығында, һыуын да. Ауырыуын да һәм уға дарыуын да, кешеләрҙе төрлө яҡлап һынап ҡарармын", ти Хаҡ Тәғәлә. Динебеҙ: "Таҙа кейенегеҙ, йорттарығыҙ таҙа булһын, күңелдәрегеҙ пак булһын", тип өйрәтә. Йәшерен ауаз менән 23 йыл буйына Ябраил фәрештә арҡыры пәйғәмбәребеҙ Мөхәммәд мостафа саллаллаһу ғәләйһиссәләмгә төшкән дин - Ислам дине ул. Һәр бер кеше донъяға мөъмин-мосолман булып тыуыр, ти Ҡөрьән-Кәрим, ә Аллаһы Тәғәләгә һәр кем үҙ дине менән яҡын килер, шуның өсөн дә ерҙә диндәр бик күп. Беҙ үҙ динебеҙҙе башҡа диндәрҙән өҫтөн ҡуйып, дини, милли ғауға ҡуптарыуҙан Аллаһ Үҙе һаҡлаһын. Ниндәй дин менән Үҙенә яҡын килерен һәр ҡәүемгә Аллаһы Тәғәлә Үҙе билгеләгән.

Иман - ул тәрбиә емеше. Имандың иң оло баҫҡысы булып ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙҙы, әсәйҙәребеҙҙе, атайҙарыбыҙҙы хөрмәт итеү тора. "Мөъминдәрҙең иманға иң өҫтөн булғаны - әхлағының иң яҡшы булғаны, хәйерле булғандарығыҙ ҡатындарығыҙға ҡарата иғтибарлы булғандарығыҙҙыр". "Йәннәт - әсәйҙәрҙең аяҡ аҫтындалыр". Шуның өсөн дә ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙға ихтирам күрһәтегеҙ, улар менән яҡшы мәғәмәлә итегеҙ. Ҡыҙҙарыбыҙҙың уҡымышлы һәм тәрбиәле-иманлы булыуыҙарына булышлыҡ итеү, уларҙы ҡәҙерле хөрмәт эйәһе - әсә вазифаһына әҙерләү - һәр кемдең мөҡәддәс бурысылыр.

Иманыбыҙҙы тәрбиәләү - динебеҙҙән булһа, ә рухыбыҙҙы тәрбиәләү - намаҙ булыр. Аҙыҡ - тән аҙығы булһа, намаҙ рухыбыҙға көс биреүсе.

Мәсеттәребеҙҙә йома намаҙы уҡып сыҡһаҡ, рухыбыҙға көс өҫтәлә, йәнебеҙгә лә, тәнебеҙгә лә әйтеп бөтмәҫлек рәхәтлек килә, күктәребеҙ киңәйеп киткән һымаҡ тойола, бала-саға: "һаумыһығыҙ, бабай!", тип сәләмләһә, йорттарыбыҙға көсҡеүәт артып таралабыҙ, йәмәғәт. Иман-Ислам-мөслимин - һәр саҡ бергә йөрөй. Ул беҙҙең йәшәү рәүешебеҙ. Ислам һүҙе Аллаһы Тәғәләгә буйһоноуҙы һәм итәғәт итеүҙе аңлата. Ул биш терәктән тора: Аллаһтан башҡа илаһ юҡ, Мөхәммәд - уның илсеһе, тип шәһәҙәт биреү, намаҙ уҡыу, зәкәт түләү, ураҙа тотоу һәм мөмкинлеге булғандарға бер мәртәбә хаж ҡылыу.

Иман һүҙе ғәрәп телендә: "эске килешеү, раҫлау", тигәнде аңлата. Йәғни Аллаһтың бар икәненә һәм Уның тиңдәше юҡ икәненә тәрән ышаныу. Бында "Ихлас" сүрәһе асыҡ миҫал булып тора, һәм дә Китаптарына, фәрештәләренә, Ҡиәмәт көнөнә, һәр бер нәмәнең Аллаһтың тәҡдирендә булыуына ышаныу.

Ислам, иман, һис шикһеҙ, бер-береһенән айырылғыһыҙ, сөнки Исламһыҙ - иман, иманһыҙ Ислам мәғәнәһеҙлек булыр ине.

"Аллаһ - иман килтергәндәрҙең дуҫы. Ул уларҙы ҡараңғылыҡтан яҡтылыҡҡа сығара. Ә иман килтермәгән кешеләрҙе Ул яҡтылыҡтан ҡараңғылыҡҡа илтә".

Ике донъя рәхмәте өсөн ебәрелгән Аллаһ илсеһе - Мөхәммәд мостафа саллаллаһу ғәләйһиссәләм пәйғәмбәребеҙҙең бер һүҙе - ораны әле лә көнүҙәклеген юғалтмаған: "мосолмандар өйләнешегеҙ, балалар үҫтерегеҙ, балаларығыҙҙы үлтермәгеҙ, һеҙҙең күп булыуығыҙ менән мин бүтән ҡәүемдәр ҡаршыһында ғорурланырмын", тигән ул. Ошо яуаплы бурысты тойоп йәшәйек. Һәммәгеҙгә лә иманлы ғүмер теләйем.